ОСКОН

Октябрь 2018 йыл Оскондан ялкын кабын

## 5 октябрь - Уҡытыусылар көнө



### Ҡәҙерле уҡытыусыларыбыҙ байрамығыҙ мөбәрәк булһын!

Һин, уҡытыусым, шундай наҙлап
Ҡараның күҙҙәремә.
Һүнмәҫлек ҙур дәрттәр һалдың
Бәләкәс йөрәгемә.
М.Кәрим

Уҡытыусылар бик яҡшы кешеләр. Улар үҙенең белемен уҡыусыларға бирәләр. Ауыр ваҡытта ярҙам итәләр. Бер ҡасан да бирешмәҫкә алға ғына барырға өйрәтәләр. Аңламаған фәнде аңлаталар. Минең уҡытыусым бик яҡшы. Ул барыһын да аңлатып барҙы.
Минең иң яратҡан уҡытыусым - беренсе уҡытыусым- Әхмәҙинурова Айһылыу Әмир ҡыҙы. Ул бик яҡшы уҡытыусы. Ул бөтә нимәне асыҡ итеп аңлатты, бөтә нимәнән беҙҙе күтәрҙе. Бишенсе класка әҙерләне. Ул әйтте: «Бишлегә генә уҡыһағыҙ, бик яҡшы була. Ул беҙҙе бик яратты. Беҙҙе имтихандарға әҙерләне. Айһылыу Әмир ҡыҙы бик мәрхәмәтле. Минең уҡытыусым үҙе тураһында бары тик яҡты тойғолар ғына ҡалдырҙы.

***Нафиҡова Радмила, 9-сы класс***

## 1 октябрь - Ололар көнө

**Олатайым**

Олатайымдың биш һыры,
Биш балаһы - биш яҙмышы,
Өлкән ҡыҙы тәрбиәсе булһа,

Биш балаһының биш яҙмышы.
Икенсе ҡыҙы - яҙыусы
Әсәйем инде - дефектолог,
Балаларҙы яҙырға өйрәтеүсе.
Ағайым - компьютерсы,
Кескәй ҡыҙы - уҡытыусы.
Һәр һырының үҙенә күрә,
Кескәй генә бар тарихы.
Олатайымдың биш һыры
***Шафиҡова Гүзәл, 8-се класс***



# *Башҡорт әҙәбиәтенең сағыу йондоҙо!*



Мостафа Сафа улы Кәримов 1919 йылдың 20 октябрендә Башҡортостан Республикаһының Шишмә районы Келәш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1941 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт факультетын тамамлай. Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән фронтҡа китә, һуғышта элемтә башлығы һәм артиллерия штабы башлығы булып хеҙмәт итә. Ҡаты йәрәхәтләнә: мина ярсығы күкрәгенә инеп, йөрәгенә саҡ ҡына барып етмәй ҡала.

*Ҡарҙар ирер, йылы ел иҫһә,*
*Ҡарҙар китеп барыр, яҙ килһә;*
*Бәлки, үсем кәмер дошманға,*
*Тәнемдәге тимер иреһә.*
*Ун туғыҙ йыл әрней ул яра,*
*Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа.*

Госпиталдә ятып дауаланып сыҡҡас, йәнә фронтҡа китә. Еңеү көнөнәсә фронт гәзиттәрендә хәбәрсе булып эшләй. Һуғыштан ҡайтҡас, ижади һәм ижтимағи эшкә бирелә.

1930-сы йылдарҙа уҡ яҙа башлай: 1938 йылда «Отряд ҡуҙғалды» тигән беренсе шиғыр йыйынтығы нәшер ителә; 1941 йылда «Яҙғы тауыштар» тигән шиғыр китабы сыға. Барыһы 100-ҙән ашыу шиғриәт һәм проза китабы, 10-дан ашыу пьесаһы донъя күрә. 1940 йылдан СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы. 1951—1962 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе.

Мостай Кәримдең әҫәрҙәре бер нисә тиҫтә телгә тәржемә ителгән.

2005 йылдың 21 сентябрендә Өфөлә вафат була. Өфө мосолман зыяратында ерләнгән.

Рәхмәт һеҙгә,

Хәйерле төн һеҙгә,үткәндәр!

Эйе, уңдым

Күп нәмәнән уңдым.

Минән уңды микән бүтәндәр…



# 11 октябрь – Республика көнө




*Башҡортостан,гөлбөстан*
*Сөмбөлөстан, нурбостан!*
*Шунда тыуған, шунда үҫкән*
*Башҡорт тигән арыҫлан!*
*Ш.Бабич.*

Эйе, ысынлап та, беҙ донъялағы иң матур, иң аҫыл ер- арыҫландар төбәге - Башҡортостан тигән гүзәл илдә йәшәйбеҙ. Ҡайҙа бар һуң тағы Башҡортостан кеүек киң яланға ла, түбәһе күккә ашҡан бейек тауҙарға ла, тымыҡ күлдәргә лә, бормаланып аҡҡан йылғаларға ла, мәғрүр ҡаяларға ла бай ил?! Хатта тыуған илебеҙҙе башҡа илдәр менән сағыштырыуы ла ҡыйын. Беҙҙең бөтә донъяға данлыҡлы шифалы ял йорттарыбыҙ, изге тәбиғәт ҡомартҡыларыбыҙ ғына ни тора һуң? Беҙ ошо илдә тыуып үҫкән төп халыҡ- башҡорттар – иң бәхетле халыҡ. Ләкин беҙгә шул матурлыҡтың, байлыҡтың ҡәҙерен белеү мөһим. Сөнки еребеҙҙең тәбиғәт матурлығы ла, халҡыбыҙҙың яҙмышы ла илебеҙҙең киләсәге лә беҙҙең ҡулда.

Тирә-яғыбыҙға күҙ һалайыҡ әле? Мәҫәлән, тәбиғәттең гүзәл мәлендә ғаиләң менән урманға сыҡтың, ти. Ял итеп, саф һауа һулап ҡайтырға сыҡҡанда кешеләр артынана күпме һүндерелмәй ҡалған усаҡ, буш шешәләр, сүп-сар ҡалдырылғанлығын күреп йөрәк әрней. Халҡыбыҙ бит белмәйенсә «Эскән һыуыңа төкөрмә»,- тип әйтмәгән. Әгәр һәр кем ошо мәҡәлде иҫендә тотоп үҙҙәренең артынын йыйыштырып йөрөһә, тәбиғәтебеҙ был тиклем бысранмаҫ ине.

Йә булмаһа, кисен һауа һуларға урамға сыҡтың, ти. Аҙым һайын ауыҙыңа тәмәке ҡапҡан, ҡулына һыра шешәһе тотҡан, йәмһеҙ һүҙҙәр менән һөйләшкән йәштәр осрай. Ҡарайһың да, быларҙы ата-әсәләре шулай тәрбиәләйме әллә, тип уйлап ҡуяһың. Беҙ бит, минең тиҫтерҙәрем, дуҫтарым илебеҙҙең киләсәге! Беҙ нindәй - киләсәк тә шундай ! Ә һаулығы булмаған, эскән, тартҡан йәштәрҙең киләсәге ниндәй була һуң? Шуға күрә илебеҙҙең яҡты киләсәге булайыҡ тиһәк, беҙгә төрлө насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ тороға кәрәк. Һау- сәләмәт булыу өсөн спорт менән дуҫ булыу мөһим. Һанай китһәң, илебеҙҙең киләсәге өсөн эшләйһе эштәр күп. Бөгөнгө көндә уйҙарымды тормошҡа ашырыу өсөн беренсе сиратта, һау-сәләмәт булыу.

Икенсенән, уҡыуҙа алдынғы булыу, барлыҡ предметтарҙы ла тырышып өйрәнеү һәм уңышлы ғына һөнәр һайлау. Аҙаҡтан инде дипломлы белгес булғас, һөнәрем буйынса тыуған илемә хеҙмәт итеү, матур, ныҡлы ғаилә ҡороп һау-сәләмәт, аҡыллы, тәртипле балалар үҫтереү. Сөнки ныҡлы ғаилә – ил терәге.

***Хәйруллина Дилара, 8-се класс***

Башҡортостан – йырсылар иле, шағирҙар иле.

Ер шарының картаһына
Ҡараһаң яҡшы ғына.
Башҡортостан шул картала
Бер япраҡ саҡлы ғына
М. Кәрим

Башҡортостан! Башҡортостаным минең, һинең матурлыҡҡа һоҡланмаған кеше бармы икән был яҡты донъяла?! Юҡтыр, әлбиттә. Дарҫлап типкән шағир йөрәгендә генә түгел, ә һәр кеше йөрәгендә һинең хаҡта йыр-моң урғыла. Мәҫәлән, Башҡортостандың халыҡ шағиры, башҡорт халҡының күренекле улдарының береһе Мостай Кәрим Башҡортостанды ҡайын япрағы менән сағыштыра. Ябай ғына бер япраҡ... Ә был япраҡта йәшәү дәрте, көс –ҡеүәт, икһеҙ – сикһеҙ байлыҡ, хозурлыҡ. Ысынлап та, тәбиғәт был ерҙән бер нимәне лә йәлләмәгән. Икһеҙ-сикһеҙ яландар, ҡуйы ҡара урмандар, тыныс күлдәр, зәңгәр таҫма кеүек бормаланып-бормаланып аҡҡан йылғалар, бейек тауҙар, текә ҡаялар ҙа бар бында. Ниндәй генә миҙгел булмаһын, барыбер матур бит ул минең минең Башҡортостаным.

Ниндәй генә милләт кешеләре йәшәмәй минең Республикамда.Улар барыһы ла үҙ-ара татыу, дуҫ йәшәйҙәр. Бер-береһенә ярҙамсыл.

Күренекле шәхестәр ҙә аҙ түгел минең Республикамда: Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Мәжит Ғафури, Салауат Юлаев, Рәми Ғарипов, Розалия Солтангәрәева, Гөлфиә Юнысова... Улар - барыһы ла республикам ғорурлығы. Һәр береһе тыуған еркәйемә ҡарата күңел түрҙәренән сыҡҡан шиғырҙарын, йырҙарын ижад иткән.

Үҙем дә ошо изге, бай ерҙә тыуғаным, йәшәүем менән ҡыуанам, ғорурланам. Минең тыуған ерем, Әлшәй районы Яңы-Ҡыпсаҡ ауылы. Эшсән,кунаҡсыл, ярҙамсыл халыҡ йәшәй минең ауылымда. Күпләп мал - тыуар аҫырайҙар,умартасылыҡ,йылҡысылыҡ менән шөғөлләнәләр.Тәбиғәте лә матур минең ауылымдың. Ауыл осонда ғына Йөҙ болан йылғаһы сылтырап ағып ята, киң ҡырҙарҙа еләк- емеш ҡыуаҡтары бик күп.Тирә -яҡты тауҙар уратып алған.

Республикамдың һәр бер районы үҙенең халҡы,үҙенең тәбиғәте менән дан тота. Республикам йылҡысылыҡ,урмансылыҡ,игенселек менән дә алға киткән.

Тиҙҙән минең республикам 100 йыллыҡ байрамын уҙғарасаҡ. Бер быуат ғүмер. Ошо ваҡыт арауығында ниндәй генә ваҡиғалар булып үтмәгән. Ҡыуаныслыһы ла, ҡайғылыһы ла булған. Минең халҡым бирешмәгән, бер ҡасан да башын түбән эймәгән. Мәҫәлән, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарын ғына алайыҡ. Был афәт башланыу менән, Башҡортостан халҡы берҙәм, дәррәү, ҡурҡыу белмәй дошманға ташлана. 250- нән ашыу ҡыҙ һәм улдары Советтар Союзы геройы исемен ала.

Киләсәктә минең республикам бер япраҡ саҡлы ғына түгел, ә мөһабәт имәнгә әйләнеүен теләр инем.

***Шафиҡова Гүзәл, 8-се класс***

Баш мөхәррир: Ильясова Г.М. Компьютер версткаһы: Стрижова И.М.
Мөхәрриәт: 5-11 класс уҡыусылары.